***Ата- әсәләргә консультация:***

# Лидер ҡолаһын да, илаһын да...

**Әҙерләне:**
**тәрбиәсе**
**Йыһангирова Г. М.**

## Лидер ҡолаһын да, илаһын да …

## Әйҙәгеҙ уйланып алайыҡ

Баҡтиһәң, яҡшы атай -әсәй булырға тырышып, сабыйҙы әпәүләп,һәр хәүеф хәтәрҙән аралап ҡына үҫтереү дөрөҫ тәрбиә тигәнде аңлатмай икән. Киреһенсә, артыҡ яратыу, самаһыҙ наҙ  үҙ аллы, бойондороҡһоҙ шәхес үҫтереүгә ҡамасаулауы ихтимал.

Лидерлыҡ буйынса эксперт, егерме  биш китап авторы Тим Эллор ололарҙың ете хатаһын тапҡан. Был яҙлығыуһар балаларҙа лиднр сифаттары үҫтереүгә ҡамасаулай икән. Шулай уҡ был бала үҫкәс бизнеста һәм шәхси тормошта уңышҡа өлгәшеүгә ҡамасаулай.

## Ҡолап ҡуйма!

Аҙым һайын хәүеф һағалаған заманда йәшәйбеҙ. Европа психологтары фекеренсә, урамда уйнамаған, ҡолап тубығын һыҙырмаған  бала үҫкәс төрлө фобиялар менән йонсоуы ихтимал. Абыныуҙың, ауыртыныуҙың, уңышһыҙлыҡтың  нимә икәнен белһә - ҡатымыҡ булыр, сынығыр. Сабыйҙың үҙ тиҫтерҙәре менән сәкәләшеп,үпкәләшеп алыуы ла тәбиғи. Быға ҡыҫылып,балаңды яҡлап ғауға ҡуптарыу артыҡ. Бәләкәстең тормошондағы бар хәүеф- хәтәрҙе лә юҡҡа сығарып йөрөү, уны үтә ныҡ ҡурсалау  киләсәктә йөйһөҙ ҡалмауы ла бар. Бала тәккәбер, һауалы, йә үҙен түбән баһалаған кешегә әйләнмәҫ тимә.

## Мин янында ғына!

Бала ҡолап китте йә үҫә төшә берәй күңелһеҙ хәлгә юлыҡты икән, кисекмәҫтән ярҙамға ташланабыҙ, уны самаһыҙ хистәр менән уратып алабыҙ. Тимәк, үҙенә был хәлдән сығыу юлын эҙләргә ҡамасаулайбыҙ тигән һүҙ. Иртәме – һуңмы ул кемдеңдер үҙен аралап ҡалыуына өйрәнеп китәсәк. Әгәр  мин яңылыш эшләһәм, маҡсатыма ирешмәһәм, ата - әсәйем барыһын да яйға һалыр тиеберәк фекер йөрөтә башлай…

**Мин үҙем!**

Шундай ваҡыт етер, бала барыһын да үҙе эшләп ҡарарға теләйәсәк. Хаттабәләкәстәрҙең яратҡан һүҙе лә бар: мин үҙем! Ата -әсә рөхсәт итергә тейеш. Әммә ул белмәгәндәрҙе аңлатырға, ирек бирергә кәрәк. Бала үҙ ҡылыҡтары өсөн яуап тотоп өйрәнһен.

**Тыңлаһаң, тәтәй алам!**

Балаға был тормошта күп ҡаршылыҡтарҙы еңергә уның артыҡ иркә булыуы ҡамасау итеңе ихтимал. Һорағаны алдына килә, теләгәненә өлгәшә - һис тә көс һалып торорға кәрәкмәй түгелме? Балаға, сабыр ит, юҡ кеүек һүҙҙәр әйтелһен, үҙ теләге өсөн көрәшеп, көтөп өйрәнһен.

Ғаиләлә бер нисә сабый икән, ата -әсә бөтәһенә лә тигеҙ өлөш сығара, берәүһен дә мәхрүм итмәçкә тырыша. Тик бөтәһенә лә уйынсыҡ йә берәй тәмлекәс тәтеһә, улар артыҡ тырышыуҙы һанға һуҡмаç. Бары –бер береһе лә буш ҡалмай бит. Сабый саҡтан уңыш үҙ тырышлығың һәм яҡшы эштәрең өсөн һеңдереү зарур.

Үҙен матур тотканы өсөн ниндәйҙерәйбер һатып алыу алдынан ҡырҡ тапҡыр уйлау мөһим. Әгәр һеҙҙең мөнәсәбәтматди стимулға ғына нигеҙләнә икән, эске ынтылыш та булмаç.

**Һин- иң матуры!**

Замана психологтары тикшеренеүҙәре дәртләндереү ысулының күҙгә күренмәгән эҙемтәһе булыу ихтималлығын асыҡлаған. Күпмелер ваҡыттан һуң бала шуны аңлай: ул ата -әсә өсөн генә шәп кеше, ә бүтәндәр икенсерәк уйлай икән. Артабан ата -әсәгә ышанмау китә. Һаман маҡтау ишетеү оҡшай, әммә был һүҙҙәрҙең дөрөçлөгөнә шикләнә. Ваҡыт үтеү менән быndай бала алдаша, хәбәрен арттырып һөйләй башлай, мутлашыуға хәтлем барып етә. Бына ни өсөн сабыйҙы тутыйғош һымаҡ маҡтап торорға ярамай.

Ә иң мөһиме, балабыҙға ниндәй тормош теләйбеҙ - шулай йәшәргә тейешбеҙ. Ул һәр хәрәкәт, ҡылыҡты күҙәтеп күңеленә һеңдереп йөрөй. Тормошобоҙҙо үҙ ҡулыбыҙға алыу, көсһөҙлөк күрһәтмәү, зарланып, бүтәндәрҙе генә ғәйепләп ултырмау, ҡайҙандыр ярҙам өмөт итмәү сабыйыбыҙҙа ла алдынғы булып йәшәүгә бер осҡон һалыр.